Рәмилә СӘЛИМГӘРӘЕВА

# ХАЗИНА

Бухгалтер хеҙмәте ауыр, әммә унан башҡа бер генә ойошманың да эше бармаясаҡ. Шуға ҡайһы бер етәкселәр: ”Һәйбәт бухгалтер өсөн ярты байлығым да йәл түгел”, — тип ебәрә. Икенселәре: ”бухгалтер һәр ваҡыт түрә өсөн баш ауырыуы инде ул, насар булһа, яҡшырағын ҡайҙан табырға белмәй йонсойһоң; эшенең оҫтаһы икән, башҡалар әүрәтеп, тартып алып ҡуймаһын, тип ҡалтырайһың”, — тип өҫтәй. Теләһә ҡайһы предприятиеның табышы бухгалтериялағы иҫәп-хисаптың нисек ҡуйылыуына туранан-тура бәйләнгән. Бухгалтер ул контролер ҙа, финанстар буйынса белгес тә, аналитик та, эштәрҙең барышын алдан уҡ күҙаллап ҡуйыусы ла. Шул уҡ ваҡытта сер һаҡлай белергә, тоғро булырға тейеш, сөнки ул эштәрҙең торошона һәм барышына тулыһынса хәбәрҙар. Тимәк, яҡшы бухгалтер ул — хазина.



*Рәкиә Ильясова*

Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының баш бухгалтеры Рәкиә Тимерхан ҡыҙы Ильясова ана шундай хазиналарҙың береһе. 2006 йылда институт ойошторолоуға 80, ә уның эшләй башлауына 40 йыл тула. Ә 27 йыл инде Ракия ханым — баш бухгалтер.

Ә яҡшы бухгалтер булыр өсөн ниндәй сифаттар кәрәк һуң? Әлбиттә, иң төп шарт — математикаға һәләт. Ә Рәкиәгә был фән һәр саҡ еңел бирелде. Ҡаҙ бәпкәләрен көткәндә бер төркөмөн икенсеһенә ҡушһаң нисә бәпкә була, алһаң, нисәү ҡала. Бына ниндәй мөһим мәсьәләләр менән йәшәй торғайны бәләкәй ҡыҙ.

Хәйер, бала саҡ хыялға бай була. Рәкиә бер килке тыуған ауылы Төрөмбәттең иге-сиге юҡтыр кеүек тойолған киң баҫыуҙарында иген үҫтерергә, агроном булырға хыялланды. Әммә буй еткереп, һөнәр һайларға ваҡыт еткәс, күңеленә яҡын иҡенсе даирә — һандар үҙенә тартты. Мәктәпте тамамлағас, ул бухгалтерҙар курсына уҡырға инде, бухгалтерҙың мәшәҡәтле һәм яуаплы эшен яратып өйрәнде.

Яҡшы бухгалтер законлылыҡтың һағында ла торорға, шул уҡ ваҡытта эштең тоткарлыҡһыҙ барыуына ла булышлыҡ итергә тейеш. Йәнә лә ул аналитик фекер йөрөтөү кеүәһенә эйә булырға, үҙаллы эшләй белергә, баш баҫып эшләүҙән тәм табырға, һәр нәмәне ентекләп, урын еренә еткереп башҡарырға тейеш. Үҙеңдә был сифаттарҙы тәрбиәләү

өсөн белемдең ни тиклем кәрәклеген егәрле ҡыҙ тиҙ төшөнөп ала һәм Бөтә Рәсәй финанс-экономика институтына ситтән тороп уҡырға инә. 1978 йылда инде уны баш бухгалтер итеп тәғәйенләйҙәр. Хәҙер коллективта был урында башҡа кешене күҙ алдына ла килтермәйҙәр. Ә бит ошо ваҡыт арауығында төрлөһө булды: тотош йәмғиәтебеҙ менән аҡсаһыҙлыҡты ла кисерҙек, миллиондарҙы ла ҡулыбыҙға тотоп ҡараныҡ, дефолтынан да шаңҡыныҡ. Бындай мәлдәрҙә тотош бер ҙур институттың финанс хәле өсөн яуаплылыҡ тойған Рәкиәнең йоҡоһоҙ төндәре аҙ булманы.

Әле Рәкиә Тимерхан ҡыҙының ҡулы аҫтында тиҫтәнән ашыу бухгалтер һәм кассир эшләй. Өфө күҙ ауырыуҙары институтындағы биш йөҙгә яҡын хеҙмәткәрҙең — ҡатмарлы операциялар яһаған табиптарҙың, тынғыһыҙ ғилми хеҙмәт менән шөғөлләнгән ғалимдарҙың, кеше һаулығы һағында торған бик күптәрҙең кәйефе, матди хәле, хатта иртәгәһе көнгә ҡарашы бухгалтерҙарҙың эшмәкәрлегенә лә бәйләнгән.

Элегерәк, институт тулыһынса бюджет аҡсаһына финансланған саҡта, бухгалтерҙарҙың эше, әлбиттә, бөгөнгө менән сағыштырғанда күпкә еңелерәк, дөрөҫөрәге, мәшәҡәтһеҙерәк булған. 1992 йылда үҙҙәрендә производство асып, линзалар, трансплантаттар һәм башҡа продукция етештерә башлағас, иҫәп-хисап эшен дә үҙгәртеп ҡорорға тура килә. Эшҡыуарлыҡ менән республикала иң тәүгеләрҙән булып шөғөлләнергә тәүәккәлләгән институт, башлап барыусыларға хас булғанса, күп ҡыйынлыҡтарға, ҡаршылыҡтарға осрай. Ә институттың ифрат алдынғы ҡарашлы, заманса фекерле һәм тынғыһыҙ директоры Марат Тәлғәт улы Аҙнабаев оҙаҡ йылдар эшләү дәүерендә баш бухгалтерына таянырға күнеккән. Етәксенең идеяларын тормошҡа ашырырға ярҙам иткәндә эштәрҙе законлы итеп ойоштороу, шул ҡыҫымдарҙан сыҡмауҙы күҙәтеү, иҫәп-хисап эштәрен дөрөҫ алып барыу, теүәллек — бухгалтерҙың бурысы. Яңы эш хаҡтарын, табышты коллектив мәнфәғәтен күҙәтеп, шулай уҡ етештереүҙе үҫтеререлек итеп исрафламай файҙаланыу юлдарын табыр өсөн байтаҡ уйланырға, бик күп ҡаҙынырға тура килә. Әммә бындай мәшәҡәттәр Рәкиә Тимерхан ҡыҙына бик оҡшай. Ул тәбиғәте менән матур яңылыҡты йәһәт кенә күрә һалып, тормошҡа ашырырға тотона торған эшмәкәр кеше. Шулай булмаһа, өлгәшелгәндәргә һис ҡәнәғәтләнә белмәгән, уңған һәм зирәк етәксе менән шунсама йылдар буйы иңгә-иң терәп атлай алмаҫ ине.

— Рәкиә Тимерхан ҡыҙы үҙ эшен бөтөн нескәлегенә тиклем төшөнгән яуаплы белгес. Ә бит ул ауылдан килеп, маҡсатына үҙ көсө, ныҡышмалылығы менән ирешкән тырыш кеше. Иң элек бәләкәй генә вазифанан башланы. Белемен арттырып, үҙ өҫтөндә эшләп, етәксе дәрәжәһенә күтәрелде. Беҙҙең институттың бит медицина изделиелары производствоһы бар. Өҫтәүенә, уҡыу-уҡытыу мәркәзе булып торабыҙ, ғилми-тикшеренеү эштәре алып барабыҙ. Ә клиникабыҙ ҙурлығы буйынса Мәскәүҙәге С.Федоров клиникаһынан ҡала Рәсәйҙә икенсе урында. Рәкиә Тимерхан ҡыҙы бына шул киң ҡоласлы даирәлә эште бик уңышлы алып бара, — ти институт директоры, Башҡортостан Рес-

публикаһы Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, медицина фәндәре докторы Марат Аҙнабаев.

Үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, бик күп кооперативтар асылды. Шул осорҙа уның хеҙмәттәштәренең күбеһе, мул аҡса эҙләп, эш урындарын алмаштырҙы. Ә унда, заманына күрә аҡса күп түләнһә лә, налогтан ҡасырып, "ҡара" нал менән түләнгәнгә күрә, ҡартайған көндәрендә йүнле пенсия ала алмай йонсоп йөрөгәндәр ҙә бар. Был йәһәттән Рәҡиә Ильясованың выжданы саф, уны бер ваҡытта ла еңел аҡса ҡыҙыҡһындырманы, нәфсеһе ҡотортманы, тормошта йомарт һәм талымһыҙ йәшәүҙе өҫтөн ҡуйҙы. "Мин ғүмер буйы өйҙәге бюджетҡа ҡарағанда эштәгеһенә нығыраҡ көйҙөм", — тип көлә ул. Был сифаттары, әлбиттә, ғаилә тәрбиәһенән. Атаһы менән әсәһе үтә лә тыйнаҡ, сабыр холоҡло һәм саф намыҫлы кешеләр була торғайны. Тормош иптәше Рифхәт тә йәштән эшләп, тир түгеп тапҡан малдың ғына бәрәкәтле булғанына инанып үҫкән кеше. Шуға күрә Рәҡиә ханыма ғаиләһендә лә, эшендә етәкселәр менән дә еңел булды, сөнки ул мөнәсәбәттәрҙе асыҡ һәм ғәҙел нигеҙгә ҡора белә. Тағы ла шуныһы бик мөһим, һәм эргәһендәге кешеләргә рәхәт, ул һәр саҡ айыҡ аҡыллы, һәр эште төрлө яҡтан уйлап хәл итә, ике үлсәп бер киҫә торған зат. "Беҙҙең хеҙмәт илкеһалҡылыҡты яратмай, — тип өйрәтә ул ҡул аҫтында эшләгән йәштәрҙе. — Һәйбәт бухгалтер сиктән тыш бөхтә һәм йыйнаҡ булырға тейеш. Беҙҙең эштә ваҡ нәмә юҡ. Яҡшы бухгалтер "һуңынан" тигән һүҙҙе бөтөнләй белмәҫкә тейеш, сөнки кәрәкле һандарҙың онотолоп ҡуйыуы ихтимал. Ә инде ваҡытында бирелмәгән отчеттың, хата мәғлүмәттең әллә ниндәй күңелһеҙ хәлдәргә килтереүе мөмкин. — Шунан көлөмһөрәп өҫтәй: — Бухгалтерға бер кем дә рәхмәт әйтмәй. Бер ҡасан да, бер кем дә уның менән ҡәнәғәт булмай. Уның тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫлек ваҡ эштәрен күрмәй. Шуның өсөн был һөнәрҙе ғүмерлеккә һайлаған кеше эштең үҙенән ләззәт алып, теүәллектән, ғәҙеллектән кинәнеп, тәм табып эшләргә тейеш. Юҡһа, тормошо ғазапҡа әйләнәсәк".

"Мин телгә оҫта түгелмен, — ти Рәҡиә ханым. Әммә эше тураһында илһамланып һөйләй. — Элек һәр нәмәне өҫтән төшөрөлгән план буйынса, ҡәтғи нормативтарға таянып эшләгәндә, бәлки, беҙҙең хеҙмәт ялҡытҡысыраҡ та тойолоп киткән мәлдәр булғандыр. Ә хәҙер эшмәкәрлекте закон сиктәрендә планлаштырыу һәм табыш алыу өсөн ижади фекер йөрөтмәү һис мөмкин түгел, хатта ныҡ ҡына баш ватҡан саҡтар була. Предприятиены етди һалым санкцияларынан йолоп алыу, дөрөҫөрәге, етди санкцияларға килтерерҙәй көнгә төшөрмәү ҙә беҙҙең бурыс.

Һалымдар күп, закондар буталсыҡ, шуға күрә һөнәребеҙ юрисдикция менән иҡтисадты нисек тә булһа үҙ-ара яраштырырға тырышыуҙан ғибәрәт. Шул уҡ ваҡытта бухгалтер ижадсы ла бит ул, сөнки ғазаплы һәм ҡатмарлы иҫәпләүҙәрҙән һуң, ниһайәт, хисабың һуңғы тиненә тиклем килеп сыға икән, был саҡта кисергән ләззәтте бары тик яңы шиғыр яҙған шағирҙың хәләте менән генә сағыштырырға мөмкиндер. Әммә бөтә был сифаттарың булғанда ла, һәйбәт бухгалтер булыр өсөн байтаҡ йылдар ныҡышмалы хеҙмәт менән үтергә тейеш", — тип йомғаҡлай.

Ысынлап та, хәҙерге тиҙ үҙгәреп торған иҡтисади тормошта үҙеңә күберәк ҡаҙынырға, туҡтауһыҙ уҡырға кәрәк, сөнки законды белмәү яуаплылыҡтан азат итмәй. Был йәһәттән Рәҡиә Тимерхан ҡыҙының ҡул аҫтында эшләгән йәштәргә еңелерәк. Сөнки ул белеме һәм тәжрибәһе менән ихлас һәм мул уртаҡлаша.

Кешелеклелеге, талапсан ғәҙеллеге һәм эскерһеҙ тура һүҙлелеге өсөн Рәҡиә Ильясованы коллективтарында юғары баһалайҙар. Шулай уҡ уның тырыш хеҙмәте Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлыҡтары тарафынан күп тапҡырҙар Почет грамоталары, Маҡтау һәм рәхмәт хаттары менән баһаланған. ”Бик талапсан, әммә ғәҙелдәрҙән ғәҙел”, — тиҙәр уның тураһында хеҙмәттәштәре. Моғайын, тап шул сифаттары өсөн дә Рәсәй Федерацияһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тәҡдиме буйынса Мәскәү, Санкт-Петербург, Новосибирск, Дондағы Ростов, Кисловодск һәм башҡа бик күп ҡалаларҙың ғилми-тикшеренеү институттарында уларҙың финанс эшмәкәрлеген тикшереүсе ролендә әленән-әле булырға тура килә уға.

Бухгалтерға кәрәкле сифаттар ғаилә өсөн дә ифрат уңайлы икән. Улар гел бөхтә итеп йыйыштырылған өй, тәртип, ҡараулы ир һәм балалар, тәмле аш-һыу кеүек күркәм һөҙөмтәләргә килтерә. Шуға күрә яҡшы бухгалтерҙарҙан бына тигән хужабикә, хәстәрлекле әсәй һәм ҡатын сыға.

Рәҡиә Тимерхановнаның яҙмышы ла быны раҫлай. Ғөмүмән, ул үҙен ифрат бәхетле тойоп йәшәй. ”Коллективымдан, етәкселәремдән уңдым. Эшкә ҡыуанып, хатта ялдан һуң һағынып барам. Тормош иптәшемдән, балаларымдан уңдым. Кискеһен өйгә шатланып ҡайтам”, — ти ул. Хәҙер инде хаҡлы ялда булған ире Рифхәт Әмирхан улы уны аш-һыу әҙерләп, яратып ҡаршы ала. Ул шулай ғүмер буйы яратып ҡына түгел, шәхес булараҡ ихтирам итеп, хөрмәтләп ҡараны ҡатынына, ҡыйын мәлдәрҙә терәк була белде. Шуға күрә татыу ғүмер иттеләр, аҡыллы балалар үҫтерҙеләр. Балалары инде үҙҙәре аяҡтарында ныҡлы баҫып тора. Ҡыҙҙары Роза авиация университетының иҡтисад факультетын тамамланы һәм әсәһенең һөнәрен һайланы. Әсә кешегә ҡыҙының эшенең бар нескәлеген өйрәнергә тырышып, һорашып, кәңәшләшеп тороуы бик оҡшай. ”Эшем ҡатмарлы, әммә мин уны ифрат яратам. Шул һандар менән эш итеүҙән ләззәт табам”, — ти Роза ла. Ә өлкән улдары Рөстәм утыҙ йәшендә медицина фәндәре кандидаты булды. Эшенә мөкиббән киткән, төплө фекер йөрөткән, етди белгес ул. Һоҡланғыс маҡсаттар ҡуйып, тормоштан тәм һәм йәм табып йәшәү уларҙың ғаиләһен бәхетле иткән төп сифаттарҙың береһелер тип уйлап ҡуяһың был эшһөйәрҙәр менән аралашҡандан һуң. Ә бит бөгөнгө көндә йәштәрҙең күбеһен профессионал булмағандары һәм булырға тырышмағандары, күберәк матди байлыҡҡа ынтылғандары өсөн әрләйбеҙ. Шул тенденцияның көсәйә барғанына хафаланабыҙ. Ә Рәҡиә Тимерхан ҡыҙының ғаиләһе менән танышҡас, йәнә бер тапҡыр халыҡ мәҡәлөнең ни тиклем хаҡ булыуына инанып, еңел тын алаһың: ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр. Тәрбиә эшендә, өгөт-нәсихәттән бигерәк, ата-әсәнең өлгөһө мөһим. Рөстәмдең биш йәшлек кенә улы Әмирхандың да уларҙан ошо матур сифаттарҙы мираҫ итеп алырына, тормошта үҙ урынын табырына иманым камил. Ошондай ғаиләләр йәмғиәттең тотороҡлолоғона нигеҙ ташы, киләсәктең имен булырына гаранттыр ул.